# Берләшеү һәм үҫеш хаҡына

10 *июндә Өфөлә Бөтә донъя башкорттары королтайының 10 йыллығына арналған "Башкорт халкының берләшеүе һәм үҫеше хакына" фәнни-ғәмәли конференцияһы үткәрелде. Конференция эшендә королтай хәрәкәте активистары, ғалимдар, төрлө өлкәләрҙәге белгестәр, дәүләт органдары вәкилдәре катнашты. Башкортостан Президенты Администрацияһы етәксеһе Р.Ф.Хәбиров Президент М.F.Рәхимовтың котлау хатын укып ишеттерҙе. Конференция эше һөҙөмтәләре буйынса резолюция кабул ителде.*

*"Ватандаш" укыусыларына королтай трибунаһынан яңғыраған төп сығыштарҙы тәкдим итәбеҙ.*

**Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Ғөбәйҙулла улы Илишев:**

— Бынан ун йыл элек ойошторолған Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, ҡоролтай хәрәкәте Башҡортостан Республикаһының мәҙәни, социаль, сәйәси һәм башҡа өлкәләрҙәге үҫешенә ҙур этәргес көс булды. Ошо осорҙа күп эш башҡарылды, әммә эшләнәһе эштәр әлегә күберәк.

Донъя масштабында барған глобалләшеү шарттарында һәр халыҡ, уның теле, мәҙәниәте дәүләт яҡлауына мохтаж. Теләһәк, теләмәһәк тә, был процесс барлыҡ халыҡтарға, хатта иң эре этностарға ла көслө йоғонто яһаясаҡ. Шул иҫәптән беҙҙең башҡорт халҡына ла.



Бөгөнгө көндә башҡорттарҙың 30 проценты республиканан ситтә йәшәй. 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләренән күренеүенсә, башҡорттар электән күпләп йәшәгән күрше өлкәләрҙә милләттәштәребеҙ һаны ҡырҡа кәмегән. Тимәк, улар унда үҙҙәрен комфортлы тоймай. РФ Ре-



гиональ үҫеш министрлығы был проблемаға федераль кимәлдә иғтибар бирер тип ышанабыҙ. Республика кимәлендә иһә беҙ "Башҡорттар Рәсәй Федерацияһында" программаһына ярашлы эш итәбеҙ. Быйыл ҡабул ителгән был программаны ғәмәлгә ашырыу Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығына йөкмәтелгән. Программаға ярашлы, Башҡортостан Республикаһында башҡорт милләте төп, титуллы милләт булараҡ артабан үҫеш алырға тейеш. Документта гуманитар өлөш мөһим урын алған.

Программа Рәсәй Федерацияһының 35 субъекты менән эш итеүҙе күҙаллай. Бөгөнгө көндә 4 регионда республиканың даими вәкиллектәре ойошторолған, йәнә 4 регионда вәкилдәр тәғәйенләнгән. Төп йүнәлештәр буйынса улар уңышлы эшләп килә.

Иң мөһим йүнәлеш булып милли мәғариф өлкәһендәге хеҙмәттәшлек тора. Мәғариф министрлығы төбәктәрҙәге кадрҙарға методик ярҙам күрһәтеүҙе, кадрҙарҙың квалификацияһын күтәреүҙе юғары кимәлдә ойоштороуға өлгәшкән.

Ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙ үҙҙәрен этностың бер өлөшө тип тойһон өсөн мәҙәни өлкәләге хеҙмәттәшлек айырыуса мөһим. Ижади төркөмдәрҙең даими гастролдәре, китапханаларға башҡорт китаптары тапшырыу кеүек саралар ошо маҡсатҡа йүнәлтелгән.

Киң мәғлүмәт саралары, пропаганда эше лә өҫтөнлөклө йүнәлеш булып ҡала. "Башҡортостан", "Йәшлек" газеталары, "Ватандаш" журналы кеүек баҫмалар төбәктәрҙәге милләттәштәребеҙҙең социаль, иҡтисади, мәҙәни тормошон даими яҡтыртыуға ҙур көс, тырышлыҡ һала. Республика юлдаш телевидениеһы каналын (БСТ) ойоштороу оло ҡаҙаныш булды. Килешеүҙәргә ярашлы, мәҫәлән, Силәбе, Ҡурған өлкәләре лә Башҡортостан каналы тапшырыуҙарын ҡабул итеү өсөн тейешле шарттар булдырыуҙы үҙ өҫтөнә алғайны. Өфө үҙ яғынан барлыҡ эштәрҙе башҡарып сыҡты, ә Силәбе менән Ҡурған әлегә быны эшләмәгән.

Башҡортостан мәктәптәрҙә телдәрҙе уҡытыу буйынса бөтә Рәсәй Федерацияһына өлгө булырлыҡ: беҙҙә уҡытыу 6 телдә алып барыла, 14 тел предмет булараҡ уҡытыла. Педагог кадрҙарын әҙерләүҙе лә республика үҙ өҫтөнә алған. Беҙ күрше регионларҙың да башҡорт теленә шундай уҡ мөнәсәбәтен күрергә теләр инек. Был иң тәүҙә Татарстан менән Силәбе өлкәһенә ҡағыла. Мәҫәлән, Магнитогорск ҡалаһында башҡорттар күп йәшәй, әммә бер башҡорт мәктәбе лә юҡ.

Беҙҙә телдәрҙең һәм милли мәҙәниәттәрҙең үҫешенә ҙур иғтибар бүлгән илдәр тәжрибәһенә таяныу юҡ. Әйтәйек, АҠШ хөкүмәте төрлө

диаспораларҙың милли мәнфәғәттәренә тейешле иғтибар бүлгәс, ул диаспораларға ҡараған америкалылар йыш ҡына үҙҙәрен иң эре этнос — англосакстарҙан да ҙурыраҡ Америка патриоттары итеп күрһәтә. Йәнә, үҙ уңыштарыбыҙҙы күрһәтә белеү ҙә бик мөһим. Был эштә артыҡ сәйәсәт кәрәкмәй, аныҡ һандарға таяныу уңайлыраҡ. Мәҫәлән, Башҡортостанда һәм Татарстанда мәктәптәрҙә үҙ телендә уҡыған татар балалары нисбәттәрен алһаҡ, сағыштырыу беҙҙең файҙаға буласаҡ. Был факт Татарстандың Башҡортостанға ошо өлкәләге барлыҡ дәғүәләрен кире ҡаға ала.

Рәсәй өлкәләрендә эш иткәндә, иң тәүҙә РФ закондарына таянырға кәрәк. Хоҡуҡи мөхит бының өсөн бик ҡулай. Үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы ныҡлап белеү, ныҡышмалы рәүештә уларҙың үтәлеүен талап итеү мөһим.

Милли мәҙәниәттәге һуңғы эре саралар, ваҡиғаларға килгәндә, уларҙы ла милләтте берләштереү идеяһына яҡынлаштырыу мөмкин. Салауат Юлаев көндәре хәҙер йыл һайын уҙғарыласаҡ, мәҙәни өлкәләге ҡаҙаныштарыбыҙҙы ошо байрамға бәйләү уны йәмләйәсәк. Мәҫәлән, быйыл ошо байрамға композиторыбыҙ Ләйлә Заһир ҡыҙы Исмәғилеваның ”Арҡайым” балеты премьераһы әҙерләнде. Был оло эшкә, эпик характерлы әҫәргә айырыуса иғтибар итеүегеҙҙе теләр инем. 2007 йылда Башҡортостандың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл тула. Мөһим тарихи акт Рәсәй Федерацияһы кимәлендә үткәреләсәк.

Ҡоролтай эшмәкәрлегендәге ҡайһы бер етди етешһеҙлектәрҙе лә күрһәтеп үтеү кәрәктер. Иң ауыр проблема — региондар менән системалы эште көйләү. Күп етешһеҙлектәр, мәҫәлән, Бөтә донъя татар конгресы эшмәкәрлеге менән сағыштырғанда күҙгә ташлана. Әйтәйек, Мәскәүҙә, Силәбелә, Һарытауҙа, Ҡурғанда берлектә үткәрелгән милли-мәҙәни сараларҙа Ҡазан киңерәк вәкәләтлек, етдиерәк әҙерлек менән ҡатнаша, Татарстандың дәүләт етәкселәре кимәлендәге ҙур делегациялар килә, ә Башҡортостан ошо фонда юғалып ҡала, тигән һымағыраҡ фекерҙәрҙе йыш ишетергә тура килә. Әйҙәгеҙ, Бөтә донъя татар конгресының эш стиленә күҙ һалайыҡ. Конгрестың төп документтарынан күренеүенсә, улар теүәл, аныҡ йыллыҡ план буйынса эшләй. План алдан әҙерләнә. Финанс сығымдары, килемдәр билдәләнеп, бюджет төҙөлә. Дәүләт етәкселәре конгресс ойоштorған эре саралар тураһында тулы мәғлүмәткә эйә, уларға алдан һәм етди әҙерләнә. Ә беҙ иһә ҡоролтай саралары тураһында күберәк һуңлап беләбеҙ. Сәбәбе — эш стилендә.



Йәнә, Бөтә донъя татар конгресы бик күп информатив материал тарата, шул

иҫәптән ”Интернет” аша. Ә Ҡоролтай сайтын ҡараһаң, хатта Башҡарма комитет составы тураһында ла мәғлүмәт юҡ. Башҡарма комитетта компетентлы белгестәр, айырыуса хоҡуҡсылар кәрәк. Эмоцияларға иҫәпләнгән ”ҡыҙыу” телмәрҙәр осоро үтте, хәҙер етди һүҙ, эш талап ителә.

Алдынғы йәштәрҙе йәлеп итеү мөһим. Бәлки, элекке комсомол кеүек, — был ”комсомол” һүҙенән ҡурҡмайыҡ — эффектлы эшләгән йәштәр ойошмаһы төҙөү кәрәк булыр. Йәштәр менән эшләмәһәк, уларҙың бер өлөшө деструктив көстәр йоғонтоһона эләгеүе ихтимал. Бөгөнгө көндә иң мөһиме — йәштәргә белем биреү, әммә уҡыу йорттарын финанслау йылдан-йыл кәмей бара.

Региондар менән эшкә төрлө өлкәләрҙәге белгестәрҙе йәлеп итеү мөһим. Мәҫәлән, Пермь өлкәһендәге башҡорттарҙың тарихына, этник үҫеш проблемаларына, мәҙәниәтенә иғтибар етмәү сәбәпле, ундағы халыҡты ниндәйҙер ”үҙенсәлекле татар-башҡорт этносы” тип күрһәткән концепция өҫтөнлөк ала. Белгестәребеҙ ошо прецедентҡа, башҡа төбәктәрҙәге оҡшаш хәлдәргә иң юғары кимәлдә етди баһа бирергә тейеш.

Төбәктәрҙәге эште Башҡортостандың даими вәкиллектәре менән бергә алып барыу эффектлы. Әммә әлегә урындарҙа тейешле бәйләнеш, берҙәмлек етешмәй. Айырыуса был Силәбеләге ҡоролтай һәм вәкиллек эшенә ҡағыла. Яңыраҡ Ҡурғанда булырға тура килде. Төрлө милли ойошмаларҙың офистарына инеп сыҡтыҡ. Бөтә ерҙә йәнле эш бара, компьютерҙар эшләй, кешеләр урынында ултыра, ә ҡоролтай бүлмәһендә хатта ут та юҡ — энергия өсөн ваҡытында түләмәү сәбәпле өҙгәндәр. Улай эш бармаясаҡ. Ундай етешһеҙлектәр күп әлегә.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына 10 йыл. Был осор эсендә күп эштәр эшләнгән. Шул эштәрҙе барлап, уларға баһа биреп, киләһе 10 йылда нимәләр эшләргә кәрәк — бөтәһен аныҡ билдәләйек, тағы ла күберәк эштәр башҡарайыҡ.

**Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов:**

— Теүәл 10 йыл элек Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы бинаһына нигеҙ һалына башланы. Нигеҙе һалынып та, йорто төҙөлөп бөтмәгән осраҡтар була. Ҡоролтай иһә тәүҙән үк ныҡлы нигеҙгә ҡоролдо. Ул нигеҙҙе ”Урал” Башҡорт халыҡ үҙәге, ”Аҡ тирмә” клубы һәм башҡа милли ойошмалар тирәһендә тупланған интеллигенция вәкилдәре төҙөнө. 1995 йылда тәүге ҡоролтайҙы үткәреү эшенә республика етәкселәре, шул иҫәптән Рим Баҡыев, Миҙхәт Мәмбәтов, Рәшиҙә Солтанова һәм башҡа дәүләт эшмәкәрҙәре күп көс һалды.

Икенсе ҡоролтай 2002 йылда, яулап алынған суверенитет сикләнә башлаған мәлдә үткәрелде — шуныһын да иҫәпкә алырға кәрәк. Бөгөнгө шарттар ҙа еңелдән түгел. Башҡортостан үҙ көсө менән эшләп алған барлыҡ килемдәрҙең биштән дүрт өлөшө Мәскәүгә оҙатыла, республика халҡының, иң тәүҙә башҡорт милләтенең үҫеш мөмкинлектәре сикләнә. Башҡорт халҡының социаль-иҡтисади, милли-мәҙәни үҫешен тәьмин итеүгә тәғәйен финанс саралары республикала ҡалырға тейеш. Тарих ҡабатлана — Рәсәй менән төҙөлгән килешеүҙәр йәнә ”ҡағыҙ киҫәге”

генә булып ҡалды. Республикалағы көсөргәнешлектең төп сәбәбе — иҡтисади проблемаларҙа. Тимәк, ошо хәлде халыҡҡа тейешенсә аңлатыу талап ителә. Кире осраҡта иһә проблема бөгөнгө оппозиция өсөн генә уңайлы булып ҡаласаҡ.

Беҙ ул оппозицияны үҙебеҙ үҫтерәбеҙ. Бөгөнгө деструктив оппозицияны. Ҡарағыҙ, кем ул оппозицияла? Етәкселәре — заманында үҙебеҙ күтәргән, парламентҡа үткәргән, яуаплы вазифаларға тәғәйенләнгән шәхестәр. Әгәр улар хәҙер фәҡәт ҡаршы тороуға өҫтөнлөк бирә икән, тимәк, беҙ оппозиция менән эш итә белмәйбеҙ. Демократик йәмғиәттә оппозиция мөһим роль уйнай, әммә ул конструктив диалогҡа әҙер булырға тейеш. Беҙҙәге оппозиция нигеҙҙә ҡалаларҙа йәшәгән, уңышһыҙ реформалар һөҙөмтәһендә бөлгөнлөккә төшкән социаль ҡатламдарҙы үҙ яғына ауҙарыуға өлгәште. Хәҙер уның күпмелер социаль нигеҙе бар. Әммә резервтары тағы ла ҙурыраҡ. Мәҫәлән, урта ҡатлам, интеллигенция ҡатламы. Хәҙерге демократик йәмғиәттәр үҙ социаль йүнәлешен нигеҙҙә урта ҡатламға иҫәпләп тота. Көслө урта ҡатлам — социаль йәмғиәттең нигеҙе. Әгәр беҙҙәге оппозиция урта ҡатламды ла үҙ яғына ауҙарыуға өлгәшһә, проблемалар артасаҡ. Ошо ситуацияны етди өйрәнеү талап ителә.

2002 йылда халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы үткәрелгәс, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары менән бәйле киҫкен хәл онотола төштө. Әммә ул төбәктәргә әүәлгесә иғтибар етмәй. Унда комплекслы эш алып барыу мөһим. Төбәк башҡорттарының боронғо тарихына, мәҙәни тамырҙарына иғтибарҙы арттырыу талап ителә. Милли үҙаңды тергеҙеү эше ошо төбәктәге халыҡтың боронғо башҡорт тамырҙарына, мәҙәниәтенә таянып, урындағы үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып башҡарылырға тейеш.

Милли үҫештең мөһим күрһәткестәренең береһе — етәксе даирәләрҙәге кадрҙар. Республиканың юғарғы етәкселәре араһында башҡорттар бөгөн ни бары 16,4 процент тәшкил итә. Мазһар Иҫәнбаев менән Марат Ҡолшәрипов мәғлүмәттәренә ярашлы иһә — 9 процент. Совет осоронда милли кадрҙар ғәмәлдә декоратив роль генә уйнаһа ла, ул мәлдә, мәҫәлән, 1989 йылда башҡорттар етәкселектә байтаҡҡа күберәк була һәм 24,4 процент тәшкил итә. Сағыштырыу өсөн: күрше Татарстанда был нисбәт, киреһенсә, 1989 йылдағы 64 проценттан хәҙер 80 процентҡа етте. Кадрҙарҙың сифатына ла иғтибар күберәк кәрәк. Әйтәйек, престижлы нефть, авиация техник университеттарында башҡорт йәштәре бик аҙ, ул уҡыу йорттарын тамамлаусыларға ла артабан иғтибар юҡ.

Күтәрелгән проблемаларҙың күбеһенә социологтарыбыҙ яуап бирә алыр ине. Ләкин улар республикалағы хәлдәрҙең ”парад яғын” ғына күрһәтә, проблемаларҙы урап үтә. Бының сәбәбе — көслө социология мәктәбе булмауҙа.

Милли үҙаңды күтәреү йүнәлешендә хоҡуҡсыларыбыҙға ла дәғүәләр бар. Милләттәштәребеҙ кеше хоҡуҡтарын, милләт хоҡуҡтарын, уларҙы гарантиялаған хоҡуҡи нормаларҙы, хоҡуҡи институттарҙы белмәй. Был өлкәлә етди аңлатыу эше башлау кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт теленә иғтибар артты, тиһәк тә, уны ҡулланыуҙа ла кире күренештәр бар. Милләтте, йәштәрҙе матур итеп үҙ телендә һөйләшергә өйрәтеү мөһим. Хәҙерге заманда был эштә телевидение һәм радионың роле ҙур. Әммә унда дөрөҫ, матур итеп әҙәби башҡорт телендә һөйләшеү аҙ. Әҙәби телдең фонетикаһын, грамматикаһын белеүҙе ныҡыраҡ талап итеү кәрәктер.

Телгә, үҙ милләтеңә ихтирам булһын өсөн әле күп эшләргә кәрәк. Әйтәйек, быйыл Бөйөк Еңеүҙең юбилейын байрам иттек. Өфөлә Башҡортостанға бер ниндәй ҡыҫылышы булмаған шәхескә һәйкәл ҡуйылды. Үҙебеҙҙең генерал Шайморатов, Даян Мурзин кеүек шәхестәребеҙҙе күтәрһәк, республикаға, үҙ халҡыбыҙға ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләргә булышлыҡ итер ине.

Һуңғы йылдарҙа эпостарыбыҙға, боронғо ҡомартҡыларыбыҙға иғтибар артты. "Урал батыр" дастанын ЮНЕСКО кимәленә сығарыу, донъя йәмәғәтселегенә тәҡдим итеү мөмкинлеге бар. ЮНЕСКО штаб-квартираһынан шул мәсьәлә буйынса саҡырыу ҙа килде, әммә эш хөкүмәт даирәһендә туҡталып ҡалды. Йәнә, ирекһеҙҙән күрше Татарстан менән сағыштырырға тура килә — улар "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосының бер вариантын ЮНЕСКО программаһына индереүгә өлгәште. Ҡазандың 1000 йыллыҡ юбилейына әҙерләнеүҙә лә ЮНЕСКО ярҙамына ныҡ таяналар. Ғөмүмән, Ҡазанда ундай эштәр менән Татарстан хөкүмәте шөғөлләнә, ә Бөтә донъя татар конгресы түгел. Беҙҙә иһә киреһенсә килеп сыға: башҡорт халҡының милли-мәҙәни, социаль-иҡтисади үҫешенә ҡағылышлы инициативалар фәҡәт ҡоролтайҙан баш ала, әммә беҙҙең рекомендациялар, әҙерләп биргән документтар, ҡағыҙә булараҡ, тоҡтарланып ҡала. Документта "башҡорт" һүҙе булһа, ул бөтәһен дә өркөтә һәм эш төңөлөп туҡтай. Шуға күрә, Татарстан менән сағыштырғанда, мин проблеманың ошо яғына иң тәүҙә иғтибар итер инем. Йәнә, матди-финанс йәһәтенән дә сағыштырыу беҙҙең файҙаға түгел. Татарстанды иҫкә алғанда, шуны ла әйтеп үтергә кәрәктер. Туғандаш республика менән мөнәсәбәттәрҙә көсөргәнешле моменттар ҙа булыуы ихтимал. Әммә беҙҙең төп маҡсат, ынтылыш барыбер бер үк булып ҡала. Ә проблемаларға килгәндә иһә, уларҙың тамырҙары Ыҡ йылғаһының был яғында ла, аръяғында ла түгел, ә күпкә алыҫыраҡ ята. Асылда иһә һаман шул әүәлге "бүлгелә һәм хакимлыҡ ит" девизы менән эшләнә ул. Ә беҙ иһә татарһыҙ — башҡорт, башҡортһоҙ — татар, Татарстан, Башҡортостан булмаясағын аңлап эш итә башларға тейешбеҙ.

Ошо ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, 2002 йылда уҙғарылған оло йыйындан һуң үткән 3 йыл эсендә беҙҙең ҡоролтай хәрәкәте яңы үҫеш юлына сыҡты. Беҙ бөгөн иң етди сәйәси, социаль, иҡтисади, мәҙәни мәсьәләләргә ныҡлап тотонорлоҡ кимәлгә етеп киләбеҙ.

**Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы Советы рәйесе Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов:**

— Уҙған ун йыл эсендә беренсе ҡоролтай күтәргән проблемаларҙың күбеһе, принципиаль мәсьәләләр нигеҙҙә хәл ителде, тип иҫәпләй-

ем. Төбәктәрҙә региональ ойошмалар төҙөлөп, башҡорттар күпләп йәшәгән һәр урын ҡоролтай хәрәкәтенә йәлеп ителде. Ҡоролтай комиссиялары иҡтисади, социаль, мәҙәни өлкәләрҙәге проблемалар буйынса рекомендациялар, ҡарарҙар әҙерләп, уларҙың күпселеге йә дәүләт органдары, йә ижтимағи ойошмалар тырышлығы менән хәл ителеп килде.

II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң төрлө сәбәптәр арҡаһында Башҡарма комитет суверенитет өсөн көрәш йылдарында башҡорт милли хәрәкәтен етәкләгән интеллигенция вәкилдәре, белгестәр менән бәйләнештәрҙе юғалта башланы. Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновтың сығышында быныӊ сәбәптәре асыҡ күрһәтелде. Сәйәси, иҡтисади шарттар хәҙер ныҡ үҙгәрҙе. Бынан ун йыл элек республика социаль проблемаларҙы хәл итеүгә күберәк финанс сараларын тотоноу мөмкинлегенә эйә ине. Мәҙәниәт көслө үҫеш алды. Әммә, сәйәси суверенитетыбыҙ сикләнгән булыу сәбәпле, федераль үҙәк иҡтисади суверенитетты ла сикләп ҡуйҙы. Был хәл республиканыӊ артабанғы социаль, мәҙәни үҫешен дә сикләй башланы. Башҡорт халҡыныӊ үҫешен тәьмин итеүсе финанс саралары республикала ҡалырға тейеш.

Ҡоролтай телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы пропагандалау йүнәлешендә ҙур эш башҡара. Башҡорт халҡыныӊ тарихын дөрөҫ күрһәтеү бөгөнгө шарттарҙа ифрат мөһим. 2002 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына әҙерлек осоронда Башҡарма комитет тарафынан 42 район буйынса уларҙың тарихын, милли составын сағылдырған брошюралар нәшер ителде. Башҡа тарихи темаларға арналған брошюралар ҙа әҙерләнде. Әммә улар ярҙамында ғына тарихи әҙәбиәткә мохтажлыҡты ҡәнәғәтләндерерлек түгел. Сағыштырыу өсөн күрше Татарстан Республикаһын алһаҡ, унда тарихи әҙәбиәт байтаҡҡа күберәк нәшер ителә. ”Татар халҡыныӊ тарихы” исемле 7 томлыҡ оло хеҙмәт донъя күрҙе. Беҙ ул йүнәлештә һуӊлайбыҙ. Ике тапҡыр республика етәкселегенә мөрәжәғәт итеп, Башҡортостан һәм башҡорт халҡы тарихы буйынса күп томлы китап нәшер итеү мәсьәләһен күтәрһәк тә, әлегә ул хәл ителмәгән. Ошо көндәрҙә Өфө тарихын өйрәнеү тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйылды. Боронғо Пашхерти, Пасакирт, Имәнҡала тарихын халыҡҡа еткереү Башҡортостандыӊ да боронғо тарихына мөнәсәбәтте үҙгәртәсәк. Күршеләр ошо йүнәлештә күп эшләй, Ҡазан, Болғар тарихы буйынса китаптар даими донъя күреп тора. Беҙ артта ҡалырға тейеш түгелбеҙ.

Башҡортостанда төрлө халыҡтарҙыӊ телен, милли мәҙәниәтен үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә, ошо яҡтан беҙҙеӊ республикалағы хәл уникаль күренеш, бөтәһе өсөн дә өлгө. Шуға күрә Башҡортостанда милләтара көсөргәнешлек артыуға объектив сәбәптәр юҡ. Быны бөтә республика халҡына аӊлатыу мөһим. Икенсе яҡтан, үҙебеҙҙәге хәлде өлгө итеп күрһәтеп, беҙ күрше өлкәләрҙеӊ, республикаларҙыӊ етәкселәре унда йәшәгән милләттәштәребеҙҙеӊ мәнфәғәттәрен аӊлауына иҫәп тота, уларҙыӊ үтәлеүен талап итә алабыҙ.

*Закир ЗИННӘТУЛЛИН әҙерләне.*